*Суфиян* **ПОВАРИСОВ**

# Шиғриәт — иманлы шәһаҙәт

*Шиғриәт — ғәрәпсә матур, нәфис һүҙ сәнғәте. Шәһаҙәт тә ғәрәптеке. Дөрөҫлөктө иҫбатлаған дәлил. «Тәңре ғишҡында шәһаҙәт итәләр...», — тип яҙа Ғ.Туҡай. Шиғриәт — хис-тойғо шөһрәте. Шөһрәт уҡыусы йәки тыңлаусының йөрәген һүҙ илаһилығында дөрләтә. Был хосусиәт «һүҙ-тойғо» тип тә атала. Әҙәби өслүбтең (стиль) төп шәһаҙәте — тыңлаусы йөрәгенә тәъҫир итеү. Әҙәби өслүбтең башҡа ғиззәтлелеге — образлылыҡ ҡиммәтлелеге. Хәҙер уны «һүҙ-һүрәт» тип әйтәбеҙ. Һүҙ-һүрәт идеялы, мәғәнәле, әһәмиәтле булырға тейеш. «Һүҙ-фекер» тип тә йөрөтөлә ул хәҙер. Тимәк, шиғриәт өсөн һүҙ-тойғо, һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер ҡәрҙәшлеге булыуы шарт. Һүҙ ҡөҙрәтенә беҙҙең эраға тиклем йәшәгән грек философы Аристотель дә ныҡ иғтибар иткән. Һүҙҙәрҙе икегә бүлеп ҡарай ул. Беренсеһе — әҫәр туҡымаһындағы шиғри яңғырашлы һүҙҙәр (поэтизмдар). Икенсеһе — шулар араһындараҡ торған битараф һүҙҙәр. «Язык — душа нации. Язык — это есть живая плоть идеи, чувства, мысли», — ти А.Толстой.*

*Милләттең ныҡлығы һүҙ көсөндә күренә. Аҙ һүҙ менән күп төшөнсә белдерелә башҡорт халҡында, ул: «Биле ныҡтың — иле ныҡ», — ти. Башҡорт халҡындағы бил ныҡлығы «Урал батыр» эпосында уҡ сағылдырыла. Бил ныҡлығы Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә, Батырша, уларҙан һуңғы баһадир ҡаһармандар образында ла данланды. Бил ныҡлығының ил ныҡлығына әүерелеүе һанап бөткөһөҙ шаукәтлелектәрҙә күренә. 2015 йылдың йәй урталарында Өфөлә үткәрелгән ШОС (Рәсәй, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Үзбәкстан илдәре), БРИКС (Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ Африка Республикаһы) саммиттары бай, матур, нәфис, гүзәл тәбиғәтле Башҡортостан еренә, уның киң күңелле, ифрат ҡунаҡсыл халҡына һоҡланып, зур баһа биреп киткәйне. Ныҡ билле халыҡтың ныҡ иле күрһәткесе был.*

*Иман — ғәрәп һүҙе. Ышаныу, инаныуҙы белдерә. Тәңре Ер шарын мөхәббәт йомғағы итеп яһай. Кеше — Ер мөхәббәте емеше. Мөхәббәт емешен маҡтап һандуғастар һайрай. Шағирҙар иманлы донъяға мәдхиә яҙа. Омар Хәйәм (1040—1123 йылдар) — тажик һәм фарсы әҙәбиәте мәшһүре. Бөйөк шағир. Бөйөклөгөн ҡысҡаса ғына әйтәйек. Юғарыла беҙ иҫкә алған шиғриәттәге һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғо дөҫлығы. Шиғриәттәге грамматик төҙөклөк. Абай әйткәнсә, һәр һүҙ эсендәге мәғәнә алтыны, һәр*

*һүҙ тышындағы көмөш ялҡыны булыу фарыз. Шиғриәттә ритм, рифма һөйкөмлөлөгө мөһим. Йәш егет менән йәш ҡыҙ мөхәббәтен сағылдырып торһон ул, хеҙмәт, матурлыҡ, һүҙ, рухи әҙәплелек, иплелек, кешелеклелек, аңлылык, аҡыллылык, иманлылык тәрбиәһе булһын. Шиғриәт бөтә йыһанға шәфҡәтлелек, шәфҡәтлелек, шәүкәтлелек таратып торһон! Яҡты булһын донъялар. Шундай бөйөк маҡсат менән яҙа Омар Хәйәм! Англия шағиры Байрон шиғриәте лә шундай бөйөк, изге рухи ғиззәтлелектә ижад ителә. Әле һаман да донъя даирәһендә шағир №1 булып иҫәпләнә ул. Беҙҙә лә булһын шундайҙар!*

*Мәғлүм ки, әҙәбиәт йылында (2015) күп төрлө саралар үткәрҙек. Миңә төрлө урында китап һөйөүселәр менән осрашырға тура килде. Йомғаҡлау рәүешендә бер данлыҡлы шағир (М.Кәрим), бер данлыҡлы прозаик (З.Биишева), бер данлыҡлы драматург (Н.Ғәйетбай) әҫәрҙәренең сәнғәтсә эшләнеше тураһында мәҡәлә лә баҫтырҙым («Ватандаш», 2016, №4). Миҫалдарҙы хәҙерге шағирҙар ижадынан ғына түгел, мәңгелек ожмахына киткәндәрҙән дә алырға булдым: Ҡол Ғәли, Дәрдмәнд, Мәжит Ғафури, Сәйфи Ҡудаштан, мәҫәлән.*

*Дөрөҫөн генә әйткәндә, хәҙерге шиғриәттең тел-өслүб үҙенсәлеге, һүҙ оҫтаһы маһирлығы, заман рухы заңын аңлай белеүе, эстетик зауығы, фекер йөрөтөү офоҡтарының киңлеге әле шул уҡ Омар Хәйәм, Байрон шиғриәте бөйөклөгө үлсәменә ҡарап тикшерелә. Улар хаҡында мин күп һөйләмәйем. Улар үҙҙәре тураһында үҙҙәре әйтә. Ҡол Ғәлиҙәге ел образы, әйтәйек, изге хәбәр ташыусы, Ғ.Туҡайҙа ел үҙе йәшәгән хәйерселекте күреп илауы, М.Йәлилдә — батырлыҡ символы, М.Ғәлиҙә — хәҙерге заман кешеһенең космосҡа ҡарата булған уй-хистәрен сағылдырыусы һ.б.*

*Дөрөҫлөктө аңлатыу өсөн башҡорт «Иманым камил!» тип тә әйтә. Замана заңына ҡарап иман да үҙгәрә ул. Ҡайһы яҡҡа үҙгәрә? Яҡшығамы? Яманғамы? Икеһе лә бар. «Әҙәм булыу» — яҡшы кеше булыу. «Әҙәм аҡтығы», «Әҙәм шәрәмәте», «Әҙәм көлкөһө», «Әҙәм түгел икән», «Әҙәмгә һанамау» тигәндәре лә бар. Ислам динендә Әҙәм — беҙҙең тәүбабабыҙ.*

*Шиғриәттәге иманлылыҡ — дөрөҫлөктәге ныҡлыҡ. Шиғриәттәге иманһыҙлыҡ — ҡороған һаҙлыҡ. Иманлы шәһәҙәт — аҫыл зат. Боронғолар шиғриәтендә бик көслө булған һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғо ныҡлығының һуңғы ваҡытта йомшай башлауы һиҙелә. Ритм, рифма аҡһаҡлығы борсой. Дәрдмәндтәге бер ел образы ғына ла бөтә ил яҙмышын сағылдыра ала. Ундай миҫалдарҙы элекке шағирҙар ижадынан күп килтерергә мөмкин.*

*Шиғриәттә хәҙер ҙур үҙгәрештәр көтөлә. Һәр ағастың үҙенсәлеге тамырынан башлана. «Башҡорт иманы — имән!» — ти халыҡ. Йәғни имәндеке кеүек ныҡлы тамырлы. Шиғриәт тә шулай. Башҡортостан ере — фанилыҡтың ожмахы ул. Был ожмахта — шиғриәт гөлләмәһе. Үткәндәрҙе уҡып ҡарайыҡ та, уларҙан өлгө-үрнәк алайыҡ. Шиғриәт өсөн яңы гөлләмәләр уйлап табайыҡ. Ялҡауланмайыҡ. Ялҡауҙарҙы яратмай шиғриәт. Уға Прометей һымаҡ ут йөрәкле шағирҙар һәм шағирәләр кәрәк!..*

## Иҫә сабах елдәре
## (Ҡол Ғәли)

Ҡулымда — ҡәләм. Күңелем — сал тарихта. Ҡом сәхрәләре. Күк йондоҙҙар менән сигелгән. Моңһоу ай йөҙә. Офоҡ алға манылған. Таң ата. Сабах елдәре иҫә. Күктәге матурлыҡ-шәфҡәтлелекте ергә таратыусы ел был. Ул матурлыҡ фәрештәләр ҡанатына тейәлеп килә, имеш. Ел уларҙы өлөшләп-өлөшләп тарата. Бик кәрәк урындарға. Ел, мәрхәмәтле-мөрәүәтле кеше һынына әүерелеп, изге хәбәр ташыусы сихри-тылсымлы көскә әйләнә. Ел йөрәге менән күк йөрәген бәйләп, йондоҙҙарҙан яҡтылыҡ, ҡояштан эҫелек, айҙан моңһоулыҡ, таңдарҙан алһыулыҡ алып, Ҡанган һәм Мысыр илдәре бәндәләренә хәйер-хаҡ биреп, бәхет-сәғәҙәт өләшеп, хозурлыҡ балҡытып иҫте ул бер ваҡыт, ғәләм киңлектәрен айҡап-байҡап, ҡанатына бик боронғоларҙан ҡалған риүәйәт-легенда, йыр-моң, йәшәү рәүеше нәсихәттәре тейәп, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың изге еренә — Болғар иленә иҫеп килеп етә ул. Унда Ҡол Ғәлиҙең ҡолағына өрә, йөрәгенә керә, күңеленә шиғри орлоҡ ялҡындары һибә. Шағирҙың күңел һандығында ел, шиғри символға әүерелеп, ҡәләм осонан ҡағыҙға тел гәүһәрҙәре булып түгелә. Улы ҡайғыһынан күңеле йәрәхәтләнеп, йөрәге әрнеп, күҙҙәре һуҡырайған пәйғәмбәр Яҡуп сабах еленә мөрәжәғәт итә:

Акрын искел, сабах йиле, нә үтәрсән,
Хакыйкать Йосыфымнан ис дотар сән.
Йәрәхәтем уңалдырмага сән йитәрсән,
Сән искәли шат-хөррәм улдым имди.

Сабах еле Яҡупҡа улы Йософтың донъяла барлығы, кешелекле, кеселекле, шәфҡәтле-мөрәүәтле булыуы, ил, халыҡ мәнфәғәте менән йәшәүе тураһындағы изге хәбәрҙе алып килә. Ел Яҡупҡа шифалы йылы ағым булып иҫә. Уның сәстәренән, ҡайғынан һуҡырайған күҙҙәренән һыйпай. Яҡуптың йәрәхәт-яралары төҙәлә, йөрәк һыҙлауҙары баҫыла, күҙҙәре күрә башлай. Шулай итеп, халыҡ йырҙарында, риүәйәттәрҙә, экиттәрҙә төрлө сифаттарҙа ҡулланылып килгән ел образы йәнләндерелеп, йәки кеше ҡиәфәтенә кереп, Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһында ҙур поэтик мәғәнәгә, образ тыуҙырыусы көслө сараға, эстетик-эмоциональ хосусиәткә әүерелә.

Таңдар һаман ата, ата; сабах елдәре иҫә, иҫә. Ҡандалыйҙың да күңелен ҡытыҡлай: мөхәббәт тойғоларын, күркәм хистәрҙе, изге аманаттарҙы үҙе аша сағылдырырға ҡуша. Унда ла сабах еле сәхрәләрҙә, сүлдәрҙә иҫә, кеше сифатына кереп, мөхәббәт кеүек изге тойғоларҙы аңлатырға ярҙам итә:

Ирәм багымдамы үстең, йөрәкәм бәгырене кистең,
Сабах йиле кеби исдең, ки, сахраларда, сүлләрдә.

Мәғлүм, егерменсе йылдар башында аҡ-ҡара, ғәҙеллек-ғәҙелһеҙлек, кешелеклек-кешелекһеҙлек көрәше синфи характер ала. Ҡол Ғәли иҫтергән шиғри ел хәҙер илдәге хәйерселек, ҡараңғы тормош, милләт яҙмышы өсөн асынып, әрнеп, илай-илай иҫеп йөрөй: «Көҙгө төн, Мин йоҡлай алмайым, Өй түрендә ел илай, Ел иламай, ас үлемдән Ҡурҡыуынан ил илай» (Ғ.Туҡай). Таҡташта ел башта нан (икмәк) һорап йөрөй, унан яңылыҡ өсөн көрәшеүсе символик көскә әүерелә. Ғ.Ибраһимовта иһә сабах еле ҡарт ағасты — иҫке тормошто төбө-

тамыры менән алып ырғыта. М.Йәлилдең «Әсәй байрамы» исемле шиғырында, Ҡол Ғәлиҙәге кеүек, хәбәр ташыусы сифатында йөрөй. Ел әсәйгә улдарының һуғыш ҡырында алмас ҡылыстарының ҡулдарынан төшмәүе, һуңғы тамсы ҡандары тамғансы көрәшеүҙәре тураһындағы изге хәбәрҙе алып килә.

Кеше — тәбиғәт балаһы. Уның йәне тәбиғәт йөрәге менән бәйле. Шуға ла, бәлки, әҙәм балаһы ҡайғы-хәсрәтен, шатлыҡ-ҡыуанысын ҡояшҡа, айға, йондоҙҙарға, алһыу таңдарға һөйләй. Уларға табынып бәхет теләй. Ә инде шул тәбиғәт хозурлыҡтарына ҡағыла-ҡағыла иҫкән елгә уның мөхәббәте айырыуса ҙур. Ул уны кеше итеп, йәне итеп күрергә ғәҙәтләнгән. Хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер шағирҙарҙың ел образы аша кешенең ғәләмгә (космосҡа) булған мөнәсәбәтен күрһәтергә тырышыуҙары ла шуға бәйләнгәндер (мәҫәлән, М.Ғәлиҙең «Ҡояш еле» поэмаһы). Ҡабатлап булһа ла әйтәйек, Болғар осоро (XIII быуат) шағиры Ҡол Ғәлиҙең шиғри еле һаман иҫә әле, ул яңынан-яңы эстетик, эмоциональ төҫ, мәғәнә төрлөлөгө, һүрәтләү-тасуирлау яңылығы менән бөтәйә бара. Теге йәки был осорҙағы шағирҙың поэтик телен тикшергәндә, ғәҙәттә, үҙенә саҡлы булған ниндәй, ҡайһы ҡәләм оҫтаһының традицияһын дауам итеүенә баҫым яһала. Әгәр «Ҡиссаи Йософ» беренсе яҙма әҫәр, ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған беренсе поэтик йәдкәр, иң олуғ мираҫ тип иҫәпләйбеҙ икән, был мәсьәләнең тамырын юллап тораһы ла юҡ кеүек. Ҡол Ғәлиҙең нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы булыуы бәхәсһеҙ. Поэзия туҡымаһында һүҙ гәүһәрҙәре, һурпа өҫтөндәге һөҙлөк кеүек, үҙен күрһәтеп тора. Ләкин шиғриәтте гел генә күҙ яуын алырҙай «сатнап торған» матур биҙәктәр менән нағышлап тороу ҙа килешмәй. «Баллы һүҙ баш әйләндерә», — ти халыҡ. Йәки: «Артыҡ ҡыҙыл тиҙ уңа».

Теоретиктар, әҙәби әҫәрҙең тел-стиль үҙенсәлеген тикшергәндә, ҡәләм оҫтаһының халыҡ тарафынан ижад ителгән традицион образдарҙы ни дәрәжәлә уңышлы файҙаланыуын асыҡларға тырышалар. Быныһы, билдәле, кеше үҫтергән гөл-баҡсаға һоҡланып ҡарап тороу кеүегерәк. Әгәр ул гөл-баҡса үҙ ҡулыңа ҡалып, һин уны яңынан-яңы сәскә-гөлдәр менән балҡытып ебәрһәң, бына шунда инде ысын мәғәнәһендә нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы була алыуың ихтимал. Ҡол Ғәли — шул маһирлыҡты күрһәтеүсе шағир. Уның йәнләндерә-һынландыра, йәнһеҙ әйбер-предметтарҙы илаһи бөйөк көскә әүерелдерә белеүе, уларҙы матурлыҡ өлгөһө итә алыуы ғына түгел, шул әйберҙәрҙәге төрлө төҫтәрҙе, сифат билгеләрен асыҡлаусы һүҙбиҙәгестәре (эпитеттары) ла ғәжәп үҙенсәлекле. Халыҡ, мәҫәлән, бик боронғо замандарҙа уҡ бәғзе берәүҙең ҡаһарманлыҡ сифатын күрһәтергә кәрәк булһа, уның өсөн «йөрәкле» тигән эпитет ҡулланған: «йөрәкле кеше». Ҡол Ғәлиҙе был ғына ҡәнәғәтләндермәй. Йософтоң физик һәм рухи көсөн, бөйөклөгөн, илаһилығын күрһәтеү өсөн ул әкиәт-легенда, төрлө риүәттәрҙәге тылсымлы-сихри көскә эйә булған ҡаһармандарҙың аҫыл сифаттарын эҙләй, уларҙы ғөмүмиләштереп, синтезлап, поэзияла классик өлгө-үрнәк булып ҡалырҙай эпитет таба: «алып йөрәкле Йософ». Уның кешелеклелек тәбиғәте, эске доньяһындағы аҫыл сифаты, башҡа күркәм яҡтары «сәғәҙәтле», «мөрәүәтле», «бар кешенән бик ҡеүәтле», «һәйбәтле», «ҡырҡ ирҙән ҡеүәте артыҡ» кеүек эпитеттар, гиперболалар ярҙамында тасуирлана. Бына бер өҙөк:

Дүртенсе — сәгадәтле һәм мөрәүвәтле,
Бишенсе — алып йөрәкле һәм һәйбәтле,
Алтынсы — бар кешенән бик куәтле,
Қырык ирдән куәте артык имди.

Һүҙбиҙәгестәр шағирға аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыу, образлылыҡҡа ирешеү, герой-ҡаһармандың эске һәм тышҡы сифатын асыҡлауҙа ярҙам итә. Әгәр ир-егет батырлығы «алып йөрәкле» һүҙбәйләнеше аша сағылдырылһа, ҡатын-ҡыҙ матурлығы Ҡол Ғәлиҙә «гәүһәр» эпитеты менән тасуирлана. Был һүҙ тышҡы матурлыҡты тасуирлау өсөн генә ҡулланылмаған. Ул мөхәббәт утында янған йөрәктең көслө, ҡайнар, ялҡынлы хис-тойғоларын тышҡы донъяға алып сыға.

Хәҙерге ваҡытта әҙәби әҫәрҙең телен тикшереүсе телсе-филологтар һүҙ сәнғәте оҫталары тарафынан ҡулланылған эпитеттарҙың төрлө моделдәрен күрһәтеүсәндәр. Әгәр әйбер-предметтағы эске һәм тышҡы сифаттарҙы бер генә үҙенсәлек буйынса асыҡларға кәрәк булһа, яңғыҙ эпитет та етә; характерлы билгеләрҙе төрлө яҡлап тасуирлағанда тиңдәш киҫәк формаһында килгән бер нисә йәки ҡатмарлы эпитеттар ярҙам итә. Эпитеттарҙың сифат, сифат-ҡылым, исем һ.б. һүҙ төркөмдәренән яһалыу күренештәре лә күҙ уңында тотола. Был төрҙәрҙең һәммәһе лә Ҡол Ғәлиҙә бар. Улар шиғырҙың поэтик канваһын биҙәп торалар. Яңғыҙ эпитеттар: нескә бил, яҡты йөҙ, нурлы йөҙ, татлы тәғәм, ләззәтле шарап; тиңдәш киҫәк булып килгәндәре: сәғәҙәтле, мөрәүәтле, һәйбәтле Йософ; йәйенке йәки ҡатмарлылары: ҡаты ҡайғылы ҡыҫынҡылыҡ, ҡыҙыл алтын беләҙек, ҡыҙыл алтын ҡадәх (һауыт), алып йөрәкле Йософ һ.б.

Һүҙбиҙәгес ынйылары менән әҙиптәр һүҙ төҫөн нурландырып торалар: ләззәтле хыялдар (Туҡай), күркәм таң (Дәрдмәнд), сихырлы йырҙар (Ғ.Туташ), асы йәштәр (З.Ярмәкәй), алтын ер (Ш.Бабич), гүзәл һуҡмаҡ (А.Еникәй), шат яҙ (Г.Сөнғәти), йәмле моң (Ш.Фидаи), алтын йәш (Н.Дәүли), алтын таңдар (В.Мифтахов) һ.б. Тиңдәш киҫәкле, йәйенке, логик һәм образлы (метафорик) эпитеттарҙың матур үрнәктәрен прозала Ғ.Ибраһимов күрһәтте: ҙур буйлы, солтанай ҡиәфәтле, ағара башлаған сәсле байбисә, мөхәббәт һәм киҫкенлек тулған матур ҡара күҙ, ғәзи науалы ҡиәфәт, һәр төрлө сәскәләр менән биҙәлгән ғәлә баҡса һ.б.

Бик боронғо ата-бабаларыбыҙ: «Сағыштырыу — танып белеүҙең инәһе», — тигәндәр. Мең әйберҙә мең төрлө үҙенсәлек. Уларҙың матурлығы, гүзәллеге, күркәмлеге, эске һәм тышҡы сифаттары, күҙгә ташланып тормаған ғәжәп йәшерен серҙәре бер-береһенә оҡшатып-сағыштырылып, танып беленә. Ҡол Ғәли сағыштырыу объекты сифатында күберәк яҡут ташы, гәүһәр, мәрйен, ынйы кеүек ҡиммәтле, поэтик яңғырашлы, матур эстәлекле әйбер-предметтар һайлаусан. Шулар аша ул «керпектәренә гәүһәр йәш ҡунған» Зөләйханың ҡайнар мөхәббәтен, йөрәк ялҡынын, күңел тетрәнеүен сағылдыра, Йософтоң эске һәм тышҡы илаһилығын, йән иретерлек күркәм сифаттарын, аҫыл һынын кәүҙәләндерә. Зөләйха ана нисек ҙурлай Йософто:

Якутә биңзәр сәнең яңактарың,
Яшь алмадин лэтыйфьрак ияктәрең.
Бал-шәкәрдин датлырак дудактарың,
Ике ләбең күңелеми өртер имди.

Йәки:

Яңа бетмеш тал сыбык тик бармактарың,
Кяфурдан артыграк сөфрактарың
Лөз-лөз энжедин теделмиш тырнактарың,
Әлләрең хәрирдан йомшак имди.

Халыҡ телгә борондан үтә етди ҡараған. Шағирҙар уның төҙөклөгө, сәнғәтлелеге, мәғәнәлелеге өсөн даими рәүештә көрәшеп йәшәгән. Боронғо ата-бабаларыбыҙ «тел ярышы» мәжлестәре үткәрә торған булғандар. Мәжлестә ҡатнашыусыларға ниндәй ҙә булһа бер тема бирелә. Уларҙың сығышы эстәлекле лә, сәнғәтле лә булһын. Телдең фекер көҙгөһө икәнлеген кеше ана шунда күрһәтә ала. Аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, бер китаплыҡ фекерҙе бер һөйләм аша биреү, оҫталыҡтың ҡыҫҡалыҡта икәнлеген раҫлау өсөн халыҡ телдең алтын хазинаһы булып ҡалырлыҡ ғәжәп күп мәҡәл-әйтемдәр ижад иткән. Улар Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһында ла күптәр. Ләкин шағир, юғарыла әйткәнсә, кеше үҫтергән гөл-баҡсалағы әҙер сәскәләрҙе генә өҙөп йөрөмәгән кеүек, мәҡәл-әйтемдәрҙе лә үҙгәртмәйсә генә ҡулланмай. Теоретиктар теле менән әйтһәк, һәр нәмәгә ижади яҡын килә белә. Халыҡтағы «Сабыр иткән — моратына еткән», «Сабырлыҡ төбө — һары алтын» кеүек мәҡәлдәр нигеҙендә ул бөтөн бер строфа төҙөй:

Йосыф әйтер: «Я Зөләйха! Бәне күргел
Баек. Мисыр газизе бәнвән белтел;
Әгәр бәне эстәр ирсәң, Мисра кәлгел, —
Баек мәне Мисыр эчрә булгыл имди.

Сабыр берлә эшләгел ушбу эши,
Сабыр берлә эшләнер эшләр башы,
Морадына тиз йитәр сабырлы кеше, —
Бу эш эчрә күрекле сабыр кылгыл имди».

Мәҡәлдәр нигеҙендә Ҡол Ғәлиҙән һуң ижад иткән шағирҙар ҙа күп-күп строфалар төҙөй. Бына М.Ҡолойҙан бер миҫал:

Сабыр берлә гөлдәр асылыр, китәр ҡыштар,
Йомыртҡанан сығар, күккә осар ҡоштар;
Сабыр берлә гәүһәр булыр ынйы таштар,
Сабырһыҙҙан ҡайнайыу бән бешһә булмаҫ.

Юғарыла әйтелгәнсә, тел-һүрәтләү саралары, төрлө поэтик биҙәктәр әҫәрҙең идея-эстәлеге һәм ул сағылдырған осорға ҡарап та ҡулланыла. Ғ.Туҡай, мәҫәлән, «Фәлсәфәүи һүҙҙәр» тигән әҫәрендә был мәҡәл-әйтемдәр эстәлегенең киреһен бирә: «Сабырлыҡ төбө — һары алтын», тигән булалар. «Шура» идараһының 75-әр тин баһа ҡуйып, «Баҫмаған шиғырҙар мәжмуғаһы» вә «Тиле ярышы» кеүек сүптәр таратыуына милләт сабыр итһә лә, сабыр төбөнән һары алтын түгел, һары бәрәңге лә сыҡмай әле». Бында инде «Заман башҡа — заң башҡа» тиергә генә ҡала.

Теге йәки был осорҙа шиғри һүҙ сәнғәтенең торошон шул ваҡыттарҙа ижад иткән ҡәләм оҫталарының әҫәрҙәре теле аша белеп була. Әлбиттә, телдең ижадсыһы — халыҡ. Телдең бөтөн ынйы-мәрйендәре халыҡтың күңел сәхифәләренә яҙыла бара. Ләкин боронғо ата-бабаларыбыҙҙың күңел сәхифәләрен беҙ уҡый алмайбыҙ бит.

Уларҙы һүҙ сәнғәте оҫталарының ҡәләмдәренән ҡағыҙға түгелгән тел гәүһәрҙәре аша ғына билдәләй алабыҙ. Мәҫәлән, XIII быуаттағы һүҙ сәнғәтенең торошон күҙ алдына килтереү өсөн «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының теленә лингвистик анализ яһарға кәрәк. Әммә уның һүҙлек составы тураһында төрлө, хатта ҡаршылыҡлы фекерҙәр йәшәп килә. Немец профессоры Карл Броккельмандың раҫлауынса, «Ҡиссаи Йософ» — боронғо ғосманлы төрөктәрҙең әҫәре. Ә инде төрки телдәрҙе өйрәнеүсе тел ғалимы Н.А.Баскаков уны боронғо ғосман теленә яҡын булған сәлжүк төрөктәре теле иҫтәлеге тип иҫәпләй. Ә.Нәжип иһә әҫәрҙең уғыҙ-ҡыпсаҡ сығышы тураһында әйтә. Ш.Мәржәни болғар яҙма иҫтәлеге тип ҡарай. Б.Йәғәфәров та Болғар дәүләтендә яҙылыуын раҫлай. Ж.Алмазов уны болғар-татар иҫтәлеге тип әйтә. Был ҡараштарҙың барыһында ла дөрөҫлөк юҡ түгел. Броккельман әйткәнсә, унда боронғо ғосманлы төрөктәрҙең тел үҙенсәлектәре лә, Баскаков фекеренсә, сәлжүк элементтары ла бар. Ләкин һуңғы осорҙағы ҡараштар ысынбарлыҡҡа күберәк тура килә.

Билдәле, поэманың һүҙлек составы шул осорҙағы һүҙлек хазинаһы менән генә сикләнә алмай, сөнки уның боронғо төрки теле менән дә бәйләнеше бар. Шуға күрә унда коюя (ҡойоға), үкеш (күп), дараюбән (тарайып), килүбән (килеп) кеүек боронғо төрки һүҙҙәрҙең булыуы тәбиғи хәл. Ләкин күпселеге — хәҙерге ғөмүми ҡулланыштағы, боронғо заманда булмаған һүҙҙәр: йөҙ, ҡара, үҙе, ата, юҡ, ярлы, һис, һүҙ, һатыу, бығау, ҡуйын, ҡол һ.б. Мәғлүм, был осорҙа төрки телдәргә ғәрәп-фарсы һүҙҙәре ташҡыны «һөжүм итә». Хатта төрки телдәргә кәмһетеп ҡарау күренеше башлана. XI быуат ғалимы М.Ҡашғари төрки телдәрҙәге һүҙҙәрҙе морфемаларға (мәғәнә киҫәктәренә) бүлеп, уларҙың шаҡтай үҫешкән, алға киткән, ғәрәп һәм фарсы телдәренән кәм, ярлы булмаған тел икәнлеген иҫбат итә. Ҡол Ғәли поэмала ғәрәп һүҙҙәренең аңлашылмағанын ҡулланмаҫҡа тырышыуы тураһында әйтә: «Гарәп, гажәм дилендә кылдым бәян; укымага, дыңламаға аға улды асан».

Өс стиль теорияһы беҙҙең эраға саҡлы йәшәгән Аристотель тарафынан өйрәнелә. Юғары стилгә «ялтырауыҡлы» һүҙҙәр керә. Түбән стилде халыҡ һөйләме тәшкил итә. Урта стиль шуларҙың икеһен берләштерә. Мин бында һис тә Ҡол Ғәли был теорияны белгән тип әйтмәйем. Әммә лингвистик анализ яһау шағирҙың шул принцип менән эш итеүен күрһәтә. Мәғәнәне тәрәнәйтеү, образлылыҡты көсәйтеү, эмоциональлекте арттырыу маҡсатында ул боронғо төрки теленән килгән формаларҙы мул ҡуллана. Ә инде ғәрәп теленән алған поэтизмдары (шәфҡәтлелек, мөрәүәтлелек, сәғәҙәтлелек һ.б.) — хәҙерге әҙәби тел өсөн дә матур биҙәктәр! Ҡол Ғәли түбән стилгә лә мөрәжәғәт итә. Халыҡта, мәҫәлән, әҙәби телдә «үлсәп ҡара әле» урынына «тартып ҡара әле» тип әйтеү хәҙер ҙә бар. «Ҡиссаи Йософ»та: «Тарттырдылар, Йосыф илә тиң кәлмәде. Яй үлчәгәч, алтын Йосыф авырлыгы була алмый». Аслан (һис тә), ойоу (йоҡлау) һ.б. ябай һөйләм лексикаһы шағирҙың халыҡ теленә ҙур иғтибар итеүен раҫлай.

Шағир ҡулланған ҡыпсаҡ-уғыҙ һүҙҙәре хәҙерге ваҡытта ла айырым диалекттарҙа йәшәй. «Халь» һүҙе, мәҫәлән, татар теленең көнбайыш диалектында (мишәр диалектында) ҡулланыла. Ҡиссаи Йософта: «Ушбу халь һич сәңа лаек дәгел». Поэмалағы гыл-гел (Бәян белгел: мән сәнәңвән, сән бенемсән) ҡушымталары менән яһалған ҡылымдар (барғыл, килгел, ҡайтҡыл) хәҙерге ваҡытта ҡырғыҙ телендә актив ҡулланыла.

Поэманың һүҙлек хазинаһы ғәжәп бай. Унда тамыр һүҙҙәр ҙә (мал, йөҙ, оло), яһалма (ҡарауыш, ғоманһыҙ, эшләмәҫлек), ҡушма төрҙәре лә (һәргиз — һәр кис һ.б.) бар. Улар ярҙамында аналитик фекерҙәрҙе синтезлап биреп була. Мал, аҡса, хазина (ҡаҙна, дәүләт, байлыҡ) — ғәрәп теленән кергән һүҙҙәр. Йософтоң баһаһын күрһәтеү маҡсаты менән шағир уларҙы парлаштыра «Бең дәва йөк, мал-хәзинә йөкләттерде». Ғөмүмән алғанда, Ҡол Ғәли парлы һүҙҙәрҙең ғәйәт матур үрнәктәрен бирә: ғәзиз-солтан, ынйы-мәрйен, туҙан-тупраҡ, мал-мөлкәт, миһырбанлы-шәфҡәтле һ.б. Һәр береһенә тәрән мәғәнә һалынған. Шағир батшаны бер урында ғәзиз, икенсе урында солтан тип атай. Өсөнсө бер осраҡта һүҙҙәрен парлай: ғәзиз-солтан: («Байыҡ, Мысыр ғәзизе-солтан булыр»). Ғәзиз — ҡәҙерле, хөрмәтле, ҡиммәтле, изге тигән төшөнсәләрҙе аңлата: «Был игенде ғәзиз белеп һәр кем игәр» (М.Ҡолой); батша, хаким мәғәнәһендә лә ҡулланыла. «Солтан» һүҙе иһә батша, хөкөмдар тигәнде аңлата. Ҡол Ғәлиҙең «ғәзиз» һәм «солтан» һүҙҙәрен парлап ҡулланыуы уның һүҙҙәренең эске мәғәнәһенә ныҡ иғтибар итеүен раҫлай.

Поэмалағы фонетик төрлөлөктәр ҙә күп нәмә тураһында һөйләй. Шағир, мәҫәлән, «һөйләү» һүҙенең боронғо формаһы «сүләү»ҙе ҡуллана: «Хатын-нар Зөләйханы гаепләп сүләмәки баянында». Был форма хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда йәшәгән татарҙар телендә һаҡланып ҡалған (сүләдем). Ҡол Ғәлиҙә «сүзләү» формаһы ла бар: «Һәр бересе бер дәрле сүз сүзләр имди».

Телсе ғалимдар хәҙерге телдәге «яҡшы» һүҙенең тамыры «яҡ» булыуы тураһында әйтәләр. «Ҡиссаи Йософ»та ла уның «яҡ» формаһы бар: «Бидгать эштән бэңа зиндан ягрәк имди». Мадъяр телендә лә «яҡшы» төшөнсәһен аңлатыу өсөн уның «я» һәм «як» формаһы ҡулланыла.

Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының һүҙлек хазинаһын, фонетик төрлөлөктәрен тикшереү тел тарихының күп үҙенсәлектәрен асыҡлауға ярҙам итә. Төрлө грамматик саралрҙың (мәҫәлән, килеш ҡушымдарының) боронғо төрки телдән килеүе, шул осор өсөн характер-лы булып, хәҙерге әҙәби телдәгеләрҙең барыһы ла ҡулланылыуы бөгөнгө әҙәби телебеҙҙең шишмә башы ысынлап та ошо әҫәрҙән башланыуын иҫбатлап тора.

Ҡайһы бер һүҙҙәр Болғар осоронда һөнәрселектең күп төрлө булыуын раҫлай. «Йондоҙсо» һүҙе, мәҫәлән, астрономия менән шөғөлләнгәнлекте аңлата. «Шәмсе», «ҡылыссы», «ҡапсы», «икмәксе», «тегермәнсе», «күнсе», «тегеүсе» кеүек һүҙҙәр ҙә илдең йөҙөн, халыҡтың тормош-көнкүрешен, йәшәү рәүешен теге йәки был дәрәжәлә күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Арпа сәсеү, арпа икмәге ашау, бойҙай башаҡтары, ашлыҡ амбарҙары, һимеҙ һыйыр, күҙгә һөрмә тартыу, беләҙектәр бүләк итеү кеүек һүҙбәйләнештәргә иғтибар итегеҙ.

Ғәрәп теленән ҡабул ителеп, йәмғиәт, дәүләт төҙөлөшө, идара эштәренә (ғаилә, нәҫел, ҡәбилә, әмир, ғауам, шаһит, хөкөм, хаким), уҡыу-уҡытыу эштәренә (китап, ҡәләм, мөғәллим, мөҙәрис, мәҙрәсә), мәҙәниәткә ҡараған һүҙҙәр (әҙип, әҙәбиәт), дини эстәлекле һүҙҙәр (аллаһ, дин, иман, ғибәҙәт, фарыз, сөннәт, хаж, ҡорбан, йәннәт) башҡорт һәм татар телдәренең һүҙлек хазинаһында хаҡлы урын алдылар.

Ҡол Ғәли мәғәнәләш һүҙҙәр (синонимдар) менән эш итеүҙең дә матур үрнәктәрен күрһәтте. «Матурлыҡ» төшөнсәһе унда «нәфис», «зиннәтле», «хуп», «зифа», «гүзәл», «һылыу», «матур», «күркәм», «күрекле» кеүек һүҙҙәр менән тәҡбир ителә.

Һәр милли телдең үҙенә генә хас фразеологик әйтемдәре була. Улар тормош-көнкүрешкә, йәшәү хосусиәтенә, иҡтисади-сәйәси хәлдәргә, мәҙәниәткә һ.б. бәйле рәүештә барлыҡҡа килә. Тел биҙәктәренең алтын хазинаһын тәшкил иткән ул берәмектәр, теоретиктар теле менән әйтһәк, ҡатып ҡалған форма булып иҫәпләнәләр. Ләкин һүҙ сәнғәте оҫталары, әгәр стиль, әҫәрҙең идея эстәлеге талап итһә, уларҙы үҙгәртәләр ҙә. Был үҙенсәлек «Ҡиссаи Йософ»та ла бар. «Дәрт бар, дарман юҡ» тигән фразеологик әйтемде, мәҫәлән, «Татар теленең фразеологик һүҙлеге» исемле хеҙмәтендә (1989, 238 б.) Н.Иҫәнбәт былай билдәләй: «Теләк, ынтылыш бар, эшкә ашырырлыҡ көс-ҡеүәт юҡ, хәл юҡ, сара юҡ тимәктән әйтәм. Бынан мең йыллап элек үк беҙҙә таралған боронғо әйтемдәрҙән...» Беҙ юғарыла Ҡол Ғәлиҙең халыҡ ижад иткән мәҡәл-әйтемдәрҙе, төрлө һүрәтләү сараларын идея-эстетик маҡсатта нисек үҙгәртеүен, эшкәртеүен, үҙенсә ҡулланыуын күргәйнек. «Ҡатып ҡалған» тел сараларын да шағир «ватып-тарҡатып», поэзия туҡымаһына үҙенсә яраҡлаштыра. Әлеге фразеологик әйтемдәрҙе ул «Бу дәрдә һичбер дәрман белүмәзвән» тип ала.

«Ҡатып ҡалған» тел сараларын эшкәртеүҙә Ҡол Ғәлиҙән һуң ижад иткән Мөхәммәдьяр, У.Имәни, Ғ.Ҡандалый, Ғ.Туҡай кеүек шағирҙар ҙур оҫталыҡ күрһәтте. Бер үк һүҙ менән яһалған фразеологик әйтемдәрҙе һәр шағир үҙенең стилистик маҡсатында үҙенсә ҡуллана: хәсрәт менән йөрәкте бағлау (Ҡол Ғәли); йөрәк-бәғер ҡайнап бешеү (М.Ҡолой); йөрәк майы һыҙылып бөтөү (Ғ.Ҡандалый); йөрәк һыҙлау (Ғ.Туҡай); йөрәк майы һыҙыу (Ш.Бабич) һ.б.

Һүҙ сәнғәте оҫталары әлеге бер-береһенән айырым ҡулланылмаған, «ҡатып ҡалған» теҙмәләрҙең берәр компонентын алып ташларға, уның урынына башҡа һүҙ ҡулланырға ла «күп һорамайҙар». Мәҫәлән: халыҡта — күңел көҙгөһө, Ғ.Ибраһимовта — рух көҙгөһө, халыҡта — диңгеҙ кисеү, Ғ.Ибраһимовта — ҡан даръяһы кисеү һ.б.

Бындай үҙгәртеүҙәр яҙыусының эстетик идеалы, әҙәби әҫәрҙең идея эстәлеге һәм ул сағылдырған осор рухына бәйле күренеш. Әлбиттә, Н.Иҫәнбәт әйткәнсә, фразеологик әйтемдәрҙең барлыҡҡа килеүен мең йылдар менән генә сикләү дөрөҫ булмаҫ ине. Халыҡ әле уҡый-яҙа белмәгәндә үк үҙенең аҡылы, донъяға ҡарашы, йөрәк һыҙланыуы, күңел тетрәнеүе ҡушыуы буйынса ижад иткән. Ҡол Ғәлиҙәге «нәфсем эстәр», «гакылым кәлмәз», «гакылы шашды», «йөзе балкыды», «шатлык ягьды», «мөшкел хәлгә дөшде», «каты гыйшык», «һуш китү», «акыл шашу», «күңел тулу», «нур өстендә нур», «хәтерне алу», «йөз сулу», «ант эчү», «күз салу», «хәйран калу», «күңел тулу» һ.б. шуның кеүек фразеологик әйтемдәр шағирҙың тел ынйыларына иғтибарлы булыуын раҫлайҙар.

Был мәҡәләлә һүҙ сәнғәтебеҙҙең шишмә башы булған «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының хәҙерге әҙәби телгә мөнәсәбәтен теге йәки был күләмдә асыҡларға тырышылды. Һүҙҙе боронғо Ҡанган һәм Мысыр далаларында иҫеп йөрөгән таң еле образынан башлағайныҡ. Хәҙер йәнә шуға әйләнеп ҡайтаһы килә. Дәрдмәнд илен ташлап, сит илгә китергә уйлағас, бына ниндәй хистәр кисерә:

Тәгәрәп уйнап,
Буй үскән
Туган илем, исән бул!
Чәч тузгытып
Жай искән
Таңгы жилем, исән бул!
Йөгереп-йөгереп туктаган...
Яулык болгап сыктаган
Нәзкәй билем, исән бул!

«Сабах еле», «саба еле» Дәрдмәнд осоронда «таңғы ел»гә әүерелде, әммә ул ҡәҙерле ел! Дәрдмәндтә ул Ватан төшөнсәһе менән бәйле. Уны ҡолас йәйеп, хозурланып, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың рухын, йөрәк тибешен, иманын алып килеүсе бөйөк, сихри, тылсымлы көс итеп ҡаршыларға кәрәк.

«Ҡиссаи Йософ» поэмаһының теле төрлө хеҙмәттәрҙә иҫкә алына. Был өлкәлә күренекле ғалим Н.Хисамов эшсәнлеге маҡтауға айырыуса лайыҡ. Шулай ҙа «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының теле ныҡлап, тәрән фәнни, лингвистик анализ яһауға, ҙур күләмле хеҙмәт яҙыуға мохтаж. Ундағы фонетик төрлөлөктәр, морфологик саралар, һүҙлек хазинаһы, мәҡәл-әйтемдәр, фразеологик берәмектәр, һүрәтләү-тасуирлау биҙәктәре... — барыһы ла боронғо төрки теле менән дә, хәҙерге әҙәби тел менән дә бәйләнешле. Уны боронғо төрки теле менән хәҙерге әҙәби телде тоташтырыусы поэтик күпер тип тә атарға мөмкиндер. Был — бер. Икенсенән, әгәр поэманы әҙәби телебеҙҙең шишмә башы тип йөрөтәбеҙ икән, быны лингвистик планда ныҡлап раҫлап була. Өсөнсөнән, поэманың теле шул осорҙағы ҡәүемдәрҙең теле ни дәрәжәлә бай икәнлекте иҫбатларға ла ярҙам итә. Поэманың теле бай, тибеҙ. Ни өсөн? Шағир һүҙ сәнғәте оҫтаһы булғанға ғынамы? Уның өсөн генә түгел, әлбиттә. Шул осорҙағы ата-бабаларыбыҙҙың теле ярлы булһа, шағир әҫәрен бындай бай тел менән ижад итә алмаҫ ине. Был бай тел ата-бабаларыбыҙҙың образлы фекер йөрөтөү дәрәжәһе шаҡтай үҫешкән, танып белеү офоҡтары ныҡ киң, уй-аҡыл хосусиәттәре тәрән булыуын тәфсирләп тора.

Телебеҙҙең тамырҙары бик тәрәндә, сал тарих төпкөлөндә. Был тамырға үткер балта менән дә, үтмәҫ балта менән дә күп сапҡандар. Әммә өҙөп сығара алмағандар. Болғар осорона саҡлы, әле яҙма әҙәби тел барлыҡҡа килгәнсе үк халҡыбыҙ поэтик гәүһәр булып балҡырлыҡ мең-мең фразеологик берәмек, һүҙбиҙәгес, башҡа тасуирлау-һүрәтләү саралары ижад иткән.

Шулай итеп, әҙәби телебеҙҙең шишмә башын был осор (XIII быуат) менән генә сикләү ысынбарлыҡҡа тура килеп бөтмәй. Уға саҡлы ла яҙма әҫәрҙәр булғандыр. Ел һәр ваҡыт кешене һөйөп-яратып, иркәләп-наҙлап, сәстәренән һыйпап ҡына иҫмәй бит. Ел ваҡыт-ваҡыт ҡот оҫҡос уҫал көскә әүерелеп, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы киҫкен көрәш аса, кеше ышанмаҫтай әллә ниндәй күңелһеҙлектәр эшләп ташлай. Тарихтың аяуһыҙ ел-дауылдары «Ҡиссаи Йософ»ҡа саҡлы йәшәгән күп кенә әҙәби әҫәрҙәребеҙҙе ваҡыт упҡындары ҡуйынына йәшереп ҡуйған. Мәрхәмәтле-шәфҡәтле сабах елдәре иҫеп, ул упҡын ҡуйынын бер ваҡыт аҡтарыр, бәлки, тарих көҙгөһө боронғо йыраҡ ата-бабаларыбыҙҙың рухи донъяһы, ижад емеше булып иҫәпләнерлек, әле беҙ белмәгән әҙәби әҫәрҙәрҙе алдыбыҙға килтереп һалыр. Бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған рухи мираҫтарыбыҙ күп. Уларҙың яңынан-яңылары табылып тора.

## Дәрдмәндтең һүҙ алтыны

Һүҙ! Ул — яҙыусының төп ҡоралы. Был ҡорал эсендә алтын бар. Дәрдмәндте «алтынсы» тип тә йөрөткәндәр. Ул — алтын приискылары хужаһы. «Шағирҙың алтын приискыһында» тигән повесть тә яҙҙы М. Ғафури. Ерҙе ҡаҙып, балсыҡ араһынан алтын бөртөктәре тапҡансы ниндәй ауырлыҡтар кисерелһә, һүҙ эсендәге алтындың ҡиммәтен йәки мәғәнәһен асыҡлау өсөн дә шундай уҡ мәшәҡәт-ҡыйынлыҡтар менән ғазапланырға тура килә. Һүҙ ҡәҙерен белеү әллә шунан киләме Дәрдмәндҡә?

Һәр һүҙ эсендәге алтынды төрлө һүҙ сәнғәте оҫтаһы төрлө стилистик маҡсатта ҡуллана. Дәрдмәндтең Татарстан китап нәшриәте тарафынан 1980 йылда сығарылған йыйынтығы «Исә елдәр» тип атала. «Ел» һүҙендә ниндәй алтын бар? Нимәне аңлата был атама? Исә елдәр, үтә ғүмерме? Уны бит теләһә ниндәй шағирға ҡарата ҡулланып була. Дәрдмәнд ел образына күп мөрәжәғәт итә. Эстетик идеалын сағылдырыу өсөн кәрәкме? Улай тиһәң, ел образы Туҡайҙа ла, Таҡташта ла, Ғ.Ибраһимовта ла, М.Йәлилдә лә күп бит.

Боронғо ата-бабаларыбыҙ йәшәгән ҡыпсаҡ далаларындағы ел символик образ сифатында бик борондан файҙаланылған.

Был ел ҡыпсаҡтарға тағын да йыраҡыраҡ тарихтан иҫеп килә. Уның шулай икәнлеген, мәҫәлән, Яҡуп пәйғәмбәр сығышы аша ла беләбеҙ. Мәғлүм, Яҡуп пәйғәмбәрҙең йөрәк пәрҙәһеләй яҡын күргән һөйөклө, миһырбанлы, шәфҡәтле улы Йософто туғандары ҡойоға һала. Ҡайғыһынан Яҡуп пәйғәмбәрҙең рухы һына, сабырлыҡ уты һүнә, ахыр сиктә ҡайғыһынан күҙҙәре һуҡырая. Ул осорҙа күп ҡәүем өсөн символик һүҙ-һүрәткә (образға) әүерелгән иртәнге сабах еленә ҡайғыһын һөйләй пәйғәмбәр.

Алһыу таңдар матурлығына төрөнөп иҫкән иртәнге латиф, йомшаҡ сабах еле пәйғәмбәрҙең сәстәренән һыйпай, ҡуйындарына тула, бит остарынан үбә, Йософтоң донъяла барлығы, кешелекле, миһырбанлы, батыр йөрәкле булыуы тураһында һөйләй. Шунан пәйғәмбәрҙең юғалған күҙ нурҙары кире ҡайта, күңеле матур хис-тойғолар менән тула, йөрәге тыныслыҡ хозурлығы менән бәлзәмләнә. Уның күҙҙәре күрә башлай.

Дәрдмәндтә «сабах», фонетик яҡтан бер аҙ йыйнаҡланып, «саба» тип ҡулланыла башлай. Нисек кенә булмаһын, бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙың изге, мәрхәмәтле, шәфҡәтле был еле нәфис һүҙ сәнғәтендәге образлылыҡ (кеше сифатына кереүе), идеялылыҡ (мәғәнә аңлатыуы), эмоциональлек (хис-тойғо белдереүе) сифатын юғалтмай. Ҡандалыйҙа ул мөхәббәт хәбәрсеһе булараҡ файҙаланыла. Дәрдмәндтә лә шул вазифаны үтәй. Образ киңәйә, ҡиммәтләнә, ҙурая бара. Әлбиттә, ул шағирҙың ер аҫтынан көс менән ҡаҙып алған алтыны түгел, аң-аҡылы, хис-тойғоһо даирәһендә үҫешкән рухи алтыны. Хәҙер ул Ватан төшөнсәһе менән бәйле.

Әгәр барсаң, саба җил, безнең илгә,  
Сәламнәр әйт, сәлам ул нечкә билгә!  
Хәшендә юл өчен чәчкәен тарасын,  
Гарипнең кайтырындан фал карасын.  
Ходаенан кавышмаклык сорасын.  
Сәламнәр әйт, сәлам ул нечкә билгә!

«Ел йөрәкте елкетә», «ел сәстән һыйпай», «ел иркәләй», «ел хәбәр һөйләй»... — ниндәй генә ғибәрәләр яһалмай «ел» һүҙе менән. Дәрдмәндтә ел егермеләп төрлө ғәмәлдә ҡулланыла, әҙәби әҫәрҙең һәр туҡымаһына ул үҙ эсендәге алтыны менән килеп керә. Һәр алтын образ мөҡәддәс, илаһи, йәшерен хис-тойғолар менән бәйле. Ҡаҙып алынған алтындың да сифатын тиҙ генә белә алмағандай, һүҙ эсендәге алтындың да дәрәжәһен йәһәт кенә асыҡлап булмай. Дәрдмәндтәге егермеләп елдең береһенә генә туҡталайыҡ. Егерменсе быуат башында, бигерәк тә 1905—1907 йылдарҙан һуң донъя хәле, йәшәү рәүеше, сәйәси рух, ижтимағи фекерләү, шул осорҙағы тарихи шарттарға бәйле булараҡ, ҡапыл ғына үҙгәреп китә. Бәғзе зыялының бер күҙе — тыуған тупраҡта, икенсеһе — сит илдә. Нисек кенә ауыр тойолмаһын, айырыла тыуған ерҙән, яҙмыш сит илгә ҡанатландыра. Дәрдмәнд тә ҡанатын осорға нығыта. «Видаг!» шиғырында ул шундай юлдар яҙа:

Тәгәрәп-аунап
Буй үҫкән
Туған илем, иҫән бул!
Сәс ҡуҙғатып
Яй иҫкән
Таңғы елем, иҫән бул!
Йүгереп-йүгереп
Туҡтаған...
Яулыҡ болғап
Һыҡтаған
Нәҙекәй билем, иҫән бул!

Хәҙер «саба ел» элекке латиф, хис-тойғо ҡуҙрәтен, йөрәк шифаһы булыу һәләтен юғалтып бара. Шулай ҙа «таңғы ел» барыбер эмоционаллек менән бәйле. Таң еле менән хушлашыу — Ватан менән айырылышыу, хушлашыу. Әммә бер ҡайҙа ла китмәй Дәрдмәнд, һөйөклө, яратҡан, йәнеләй яҡын күргән тыуған илендә ҡала. Сәс ҡуҙғатып яй иҫкән таң еле Ватан ҡулы тип ҡабул ителә. Нәҙекәй бил иһә — мөхәббәт образы алтыны. Шиғриәт, билдәле, күпертелгән мәғәнәлелекте ярата. Был осраҡта һүҙ эсендә йәшеренеп ятҡан алтын бөртөгөнөң күп мәғәнәһе асыҡлана. Аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатҡан нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы Дәрдмәнд бында ла төрлө хосусиәттәрен күрһәтә. Йософ Баласағуни «Ҡотадғу белек»тә (XI быуат) былай тигәйне:

Аҙмы дәүләт-илдәр йән-тәслим итте,
Үлмәҫ тойған батшалар бар ҙа китте.

Был — тәбиғи хәл. Бер нәмә лә мәңгелек түгел. Тыуа. Ҡамиллаша. Бөтә. Быны Йософ Баласағуни, һүҙ эсендәге алтынды эҙләп тормайынса, туранан-тура әйтә. Дәрдмәнд стиле өсөн ул бик килешеп бөтмәй. Ул күсерелмәлелек менән эш итә. «Беҙ» тигән шиғырынан ике юл:

Иҫә елдәр, күсә ҡомдар... бөтә эҙ...
Дәриғ, мәхзүн күңел, беҙ ҙә бөтәбеҙ!

Ел образы бында илдә ҙур үҙгәреш буласаҡты аңлата. Дәрдмәнд элекке ил, тормош менән хушлаша. Ана шунда йәшерелгән мәғәнә алтыны. Уҡы. Эҙлә. Тап. Ғ.Ибраһимов әйткәнсә, сәнғәтле һөйләмдә әҙип мәғәнәне йәки идеяны үҙе түгел, уның һүҙҙәре аңлатып торорға тейеш. Был юғары сәнғәти оҫталыҡ менән бәйле. Барыбыҙға ла мәғлүм «Ҡарап» шиғырында был оҫталыҡтың классик өлгөһөн күрһәтте Дәрдмәнд. Шиғыр ҙа йыйнаҡ. Строфа ла. Һүҙҙәрҙәге мәғәнә ныҡ тығыҙ. Бер нисә төр ашлыҡ бөртөктәре йыйылмаһы тылҡып бешерелгән талҡандай тәмле, үҙе туҡлыҡлы.

Шаулай диңгеҙ...
Ел өрәҙер...
Елкәнен киргән карап!
Төн вә көндөҙ
Ул йөрөйҙер:
Юл бара ят ил ҡарап...
Сыҡты елдәр,
Ҡупты тулҡын
— Ил карабын ел һөрә!..
Ҡайһы юлдар, ниндәй упҡын
Тарта беҙҙе йән һорап?!.

Ғ.Ибраһимов «Беҙҙең көндәр» романын шулай башлай: «Төн ҡараңғы. Донъя тын. Ләкин диңгеҙ шаулай». Диңгеҙ — матурлыҡ, батырлыҡ, ғәйрәтлелек символы. «Шаулай диңгеҙ...» — ти Дәрдмәнд. Сәсмә әҫәрҙә шиғри сәнғәтлелек, шиғриәттә прозаға хас эпик киңлекте күрһәтеүсе ике классик диңгеҙ шаулауы аша киләсәктә ҙур тормош шаңдауы буласаҡты иҫкәртә. Ғ.Ибраһимов романындағы «тулҡын» һүҙе әллә күпме ҙур тарихи ваҡиғаларҙы, сәйәси елдәрҙе, әҫәр ҡаһармандарының рухи донъяһын асыҡлауҙа ярҙам итә. Ике классикта ла тулҡын, ел образы идеяны ҡеүәтләй.

Юғарыла ел образының Туҡайҙа ла, Таҡташта ла бихисап булыуы хаҡында әйтелгәйне. «Ҡөҙгө елдәр» исемле шиғырында Туҡай былай ти:

Ҡөҙгө төн.
Мин йоҡлай алмайым.
Өй түрендә ел илай.
Ел иламай, ас үлемдән
Ҡурҡыуынан ил илай.

Бында ла ел образы кеше сифатын кәүҙәләндерә. Идеяһы — шул осорҙағы хәйерселекте сағылдырыу. Һүҙ Ватан яҙмышы тураһында бара.

Таҡташтың «Ғазраилдар» шиғырында ла шул уҡ тема. Шиғыр 1916 йылда Беренсе донъя һуғышына ҡаршы яҙылған. Тимәк, 15 йәшлек кенә Таҡташ империалистик һуғышҡа анализ яһай алған. Шиғырҙың ҡан ағышында — фәрештә һәм ел образы. Тау өҫтөндә ултыра фәрештә. Уйға батҡан. Ҡанаттары талған килеш ергә ятҡан. Маңлайында — нурлы йондоҙ. Фәрештә бынан күп йылдар элек ергә күктән осоп килгән. Ерҙе йәннәт итә. Йәнә әйләнеп килһә, һөйәктәрҙән өйөлгән тауҙар, ҡандан йыйылған күлдәр күрә. Һуғыш. Үлем. Ел былай ти: «Фәрештәкәй, ҡас был илдән! Бында вәхшәт! Бында үлем! Бында — ғазраилдар».

Дәрдмәндтә ел — ил карабын алға этәреүсе, Туҡайҙа — ил хәйерселеге өсөн илаусы, Таҡташта ил вәхшәтен фәрештәгә һөйләүсе булараҡ файҙаланыла. Йыйып әйткәндә, өс классиктың эстетик идеалында Ватан яҙмышы ел образы аша тасуирлана. Ҡем еле көслөрәк икәнлекте асыҡлау ҙа ҡыйын кеүек. Туҡай еле ил эсендә дауыл булып иҫә. Таҡташ еле лә шулай. Ләкин уларҙың хәрәкәте билдәле бер ваҡыт менән сикләнә. Ә Дәрдмәндтә ел күңелде киләсәк, йыраҡ офоҡтар даирәһенә алып китә. Тупрағынан айырылып, ҡайҙа ғына китмәһен, үҙ елен һағына шағир:

Иҫә елдәр, иҫә елдәр,
Ул минең елем түгел;
Сит илдәрҙә бик яманһыу,
Үҙ елен һағына күңел.

Ватан еле — ябай ел түгел, уны халҡыбыҙ ижад иткән йырҙар ҙа сағылдырып тора. Беҙ уны Дәрдмәндтә, Туҡайҙа, Таҡташта ла күрәбеҙ. Ғ.Ибраһимовта ел ҡарт ағасты — иҫке донъяны төбө-тамыры менән алып ырғыта. М.Ғәлиҙең «Ҡояш еле» поэмаһында ел кешене хатта космосҡа тиклем күтәрә. Тимәк, елдең образлы ҡоласы һаман киңәйә бара. Был киңлектә Дәрдмәндтең эстетик идеяһы ла һаман хәрәкәт итә. Күперенке мәғәнәлә әйтелгән «Ил карабын ел һөрөү» идеяһын ваҡыт менән генә сикләп булмай.

Юғарыла телгә алынған һүҙ-һүрәт (образлылыҡ), мәғәнә (идеялылыҡ), хис-тойғо (эмоционаллек) ҡиммәттәренең береһе генә етмәһен, поэзия япраҡһыҙ ағастай була. «Ҡаһым түрә» риүәйәтендә ил нәҙек билгә сағыштырыла: «Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем». Дәрдмәндтә: «Нәҙекәй билем, иҫән бул!», «Сәләмдәр әйт, сәләм ул нескә билгә!»

Дәрдмәнд алһыу таңға, зәңгәр күктәге зөбәржәт йондоҙҙарға, нурлы айға, ҡайнар ҡояшҡа эске бер хис-тойғо, йөрәк мөкиббәнлеге, күңел шәфәғәтлелеге менән ҡарай, һәр күренештән образлылыҡ алтыны эҙләй. Ул алтынды үҙ йөрәге, ил йөрәге, донъя йөрәге, ғаләм йөрәге менән оҫта бәйләй. Юғары стиль, түбән стиль, урта стиль һүҙҙәрен әҫәр туҡымаһына яраҡлаштырыуҙың классик өлгөләрен күрһәтә. Бер мәҡәләлә генә уларҙың барыһына ла туҡталыу мөмкинлеге юҡ. Ҡыҫҡаһы, шағирҙың һүҙ алтынына ныҡлы анализ кәрәк. Быны өсөн шаҡтай ҡалын хеҙмәт яҙыу талап ителә.

## Бер һүҙҙә мең биҙәк
## (М.Ғафури)

Телдең коммуникатив (фекер алышыу) һәм эстетик (матурлыҡ) функциялары бар. Һәр һөнәр эйәһе бер үк һүҙҙәр ярҙамында фекер алыша. Фекер алышыуға ярҙам иткән шул уҡ һүҙҙәр әҙәби әҫәр туҡымаһында яҙыусы тарафынан төрлө стилистик маҡсатта ҡулланыла, һүҙҙәр ярҙамында төрлө поэтик биҙәктәр барлыҡҡа килә, герой-персонаждарҙың донъяға ҡарашы, рухи донъяһы, психологик кисерештәре, әҙәби әҫәрҙең идея эстәлеге асыҡлана. Тормош-көнкүрештә ҡулланылып йөрөгән ябай ғына һүҙ ҙә образ-символ дәрәжәһенә күтәрелә. Ысын мәғәнәһендә нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы булған яҙыусы бер үк һүҙҙе төрлө контекста төрлө стилистик сара сифатында файҙалана белә, һүҙҙе көтөлмәгән яғынан аса. Һүҙҙең яңы, эске сифаты асыҡлана йәки «иҫке» һүҙгә яңы мәғәнә һалына. М.Ғафури «Беренсе май» тигән шиғырында былай ти: «Был байрамда эсмәй ҙә матур гөлдәр өҙәм, Иҫке һүҙҙәрҙе йыйып, шунан яңы йырҙар теҙәм». Был шиғыр 1922 йылда яҙылған. Ысынлап та, унда бер генә яңы һүҙ ҙә (неологизм) юҡ. «Иҫке» һүҙҙәр яңы, совет дәүеренә хас төшөнсә алған. «Юл» һүҙе, мәҫәлән, ғөмүми ҡулланылышлы ябай һүҙ. Был шиғырҙың поэтик туҡымаһында ул иҫке, ҡараңғы тормошто еңеү, матурлыҡ, яңылыҡ төҙөү, совет халҡының физик һәм рухи көсөн, егәрлелеген, ҡаһарманлығын сағылдырыу символына әйләнгән.

Гөл халыҡ телендә, йырҙарҙа, ғөмүмән, сәнғәтле һөйләмдә матурлыҡ символы сифатында ҡулланыла. Был әҫәрҙә ул, минеңсә, батырлыҡ символы ла. Авторҙың «матур гөлдәр өҙәм» тип әйтеүе шиғри юлдар өсөн поэтик яңғырашлы, эске мәғәнәгә бай, тәьҫирле һүҙҙәр эҙләүен аңлата. Гөл кеүек һүҙҙәр менән яҙылған әҫәр халыҡ күңеленә ҙур идея, эстетик зауыҡ, йәшәү рухы бирергә тейеш.

Был шиғырҙың икенсе бер урынында шағир нәҡ шул хаҡта әйтә лә:

Ҙур идея, изге юл өҫтөнә
Ҡаҙап ҡуйып гөлдәр бәйләмен,
Йырлап-йырлап сикһеҙ шатлыҡ менән,
Итәйек ҙур еңеү байрамын.

Әлеге киң юл ҙур идея менән эске яҡтан органик мөнәсәбәткә керә. Ҙур идея, изге юл өҫтөнә ҡаҙап ҡуйылған гөлдәр бәйләме — матурлыҡ һәм батырлыҡ символы, сөнки ул ер йөҙөндә прогрессив көстәрҙең еңеүен, матур тормоштоң тантана итеүен символлаштыра.

М.Ғафуриҙа ҡояш, ынйы, йондоҙ, имән, һыу, йәшен, ай, тулҡын, болот, алтын, көмөш, яҡут, гәүһәр, баҡса, күҙ, ҡан, сәскә, ел, нур, шишмә, тамсы, көҙ нуры, ҡапҡа, ыласын, арыҫлан, былбыл, һандуғас, ут, дауыл, күңел, көн, йөрәк, ҡар, уй кеүек конкрет һәм абстракт исемдәр, төрлө-төрлө яңы мәғәнә белдереп, бихисап күп төрлө һүрәт яһау, образ тыуҙырыу маҡсатында ҡулланылалар.

Һүҙҙең эске мәғәнәһен, образлылыҡ нигеҙен, эстетик ҡеүәтен, стилистик маҡсатта ҡулланылғанда ниндәй яңы сифаттар менән характерланыуын тәрәнерәк аңлау өсөн уны яҙыусының бер нисә әҫәре туҡымаһында ҡарау яҡшы. Әлбиттә, образлылыҡ, күсерелмә мәғәнәлелек һүҙҙең семантик нигеҙендә барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, алтын — конкрет исем. Халыҡ телендә ул матурлыҡ, ҡиммәтлелек, сафлыҡ, ныҡлыҡ, дәрәжәлелек символы булып йөрөй. Әҙәби әҫәрҙә иһә башҡа мәғәнәлә лә ҡулланылырға мөмкин. М.Ғафури, мәҫәлән, 1905—1917 йылдарҙа яҙған шиғырҙарында уны егермегә яҡын урында ҡуллана, һәр урында ул яңы мәғәнә аңлата. Тыуған ерҙе, тупраҡты ҙурлау: «Эй, ерем, алтын кеүек күренә һинең тупраҡтарың» («Һабансының йыры»); хәҡиҡәтте аңлатыу: «Ер өҫтөндә ҡасан бөтәр алтын, шунда сығар хаҡлыҡ» («Хәҡиҡәт»); һатлыҡ йәндәрҙе фашлау: «Кем бар һуң һары алтынға һатылмаған, үҙ-үҙен алтын менән шат ҡылмаған» («Һатлыҡтар»); намыҫ, выждан, күңел сафлығын һаҡлау: «Выжданымды һатмайым алтын, көмөш һәм ынйыға» («Выждан теләге») һ.б. Һүҙҙең эске серен, ғәжәп нескә нюанстарын, сәнғәтле һөйләмдә күп төрлө йәнле картина, образ тыуҙырыу мөмкинлектәрен тағы ла нығыраҡ аңлатыу өсөн, уның төрлө яҙыусылар тарафынан нисек, ниндәй маҡсатта файҙаланылыуына ла иғтибар итергә кәрәк.

Дөрөҫ, образ ҡайһы саҡта ваҡыт менән дә сикләнә. Әйтәйек, йәй ҙә, көҙ ҙә беҙ мамыҡтай ап-аҡ ҡарҙы, ҡар бурандарын, ҡар өйөмдәрен һағынабыҙ. Ҡар күп яуған йылда икмәк уңа. Тимәк, ҡар — байлыҡ, муллыҡ, бәхет килтереүсе лә. Әгәр был һүҙ оҫта яҙыусы ҡәләменә эләкһә, уны әллә күпме стилистик-экспрессив маҡсаттарҙа файҙаланырға мөмкин. «Буранда» шиғырында М.Ғафури «ҡар диңгеҙе» һүҙбәйләнеше ҡуллана: «Ҡар диңгеҙе. Дауыл. Буран. Тығыҙ ҡараңғылыҡ уртаһында Бер ауыл. Төн. Ауыл йоҡлай. Ә тәбиғәт үҙенекен итә. Ел-дауыл, буран ҡотора». «Ҡар диңгеҙе» был осраҡта донъя киңлеген тасуирлау өсөн ҡулланылған. Ә йоҡлаған ауыл (башҡорт-татар донъяһы), уянып, оло тормош диңгеҙенә сыҡмай ҡалмаҫ.

Ғ.Ибраһимов «Беҙҙең көндәр» романында «ҡар байрамы» һүҙбәйләнешен ҡуллана: «Күгелйем төтөн болото менән ҡапланған бүлмәнән килеп сығыуға, Булатты шундай матур донъя, шундай аҡ ҡар байрамы урап алды. Ул бер йыл Урал башҡорттарында учитель булып торған ине. Ураҙғол атлы дәртле ҡарт аусы уны саңғыға өйрәтте. Ҙур тауҙар, бүрегә һунарсылыҡ өсөн йөрөүҙең тәмен татытты». Был ваҡиға Ҡазан ҡалаһында бара. Булатты урамда (уның прототибы — беренсе татар большевигы Хөсәйен Ямашев) ҡар байрамы солғап ала, һәм ул Урал башҡорттарындағы ҡышты хәтерләтә. Тимәк, ҡар байрамы Ҡазан ҡалаһын, Башҡортостан ерендәге ваҡиғаларҙы бергә бәйләй. Шулар ярҙамында герой-персонаждың рухи донъяһы асыҡлана. Ҡар байрамы был өҙөктә киләсәк яҡты тормошто символлаштыра. Ҡар байрамының аҡ төҫөн характерлау был төшөнсәне тағы ла көсәйтә.

Сифаттар тураһында бер нисә һүҙ. Муйылдай ҡара күҙҙәр, ҡарлуғас ҡанатылай ҡара ҡаштар, тулҡынлы ҡара сәстәр, тигәндә, мәҫәлән, «ҡара» һүҙе матурлыҡ төшөнсәһе менән бәйле. Ҡара күҙҙәр, ҡара ҡаштар халыҡ телендә, йырҙарҙа матурлыҡ символы булып та китте. Халыҡ телендә был сифат башҡа мәғәнәлә лә ҡулланыла: ҡара ҡайғы, ҡара көн, ҡара йөрәк. XX быуат башында ул иҙеүсе синыфтарҙы сифатлау өсөн ҡулланыла: ҡара бай. «Ауылыбыҙҙа... ҡара бай бар ине» (Ғ.Ибраһимов). «Ҡара бай» тигәндә «ҡара» һүҙе аша ҡомһоҙ, һаран, халыҡты иҙеүсе, үҙ мәнфәғәттәре өсөн генә йәшәүсе, кешеләр күңеленә ҡара яғыусы ифрат яман байҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. М.Ғафури был сифатты илленән артыҡ урында ҡуллана, һәр контекста был билдәле бер эстетик маҡсатта файҙаланыла, көтөлмәгән яғы менән асыла: ҡара йөҙ, ҡара ер, ҡара йылан, ҡара ҡан, ҡара сәс, ҡара урман, ҡара ҡапсыҡ, ҡара таштар, ҡара ҡәбер, ҡара күҙҙәр, ҡара һыу, ҡара һыҙыҡ, ҡара икмәк, ҡара болот, ҡара тән, ҡара пәрҙә, ҡара донъя, ҡара ҡояш, ҡара күл, ҡара эсле, ҡара йөрәк, ҡара юрған, ҡара сәхсифә һ.б.

«Баҡсала» шиғырында М.Ғафури был һүҙҙе матурлыҡ символы сифатында ҡуллана: «зифа буйлы матурҙар, ҡара сәстәр». Баҡсала гел ҡара сәсле ҡыҙҙарҙың ғына булыуы мөмкин түгел. «Ҡара сәс» һүҙбәйләнеше бында сибәр ҡыҙҙарҙы берләштерә. Шағир аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлата, йәнле картина тыуҙыра. Бында бер төркөм ҡыҙҙарҙы тасуирлау өсөн күп яҙырға кәрәк булыр ине, әммә «зифа буйлы матурҙар, ҡара сәстәр» барыһын да аңлатып тора.

«Ҡара» һүҙе «Йәй башы» шиғырында матурлыҡ, нурлылыҡ, ҡурҡыныслылык төшөнсәләрен сәнғәтсә берләштереп биреү йәһәтенән дә файҙаланыла:

Ҡара болот һауала төрлө төҫтә —
Матур ҙа, нурлы ла һәм ҡурҡыныс та.

М.Ғафуриҙа ҡара ҡапсыҡ («Хәйерсе») — ярлы кешенең ҡара ҡайғыһын, ҡара таштар («Ямандар мөхбәһенән ҡаҫмаҡ бәйәне») — яманлыҡты, ҡара ҡәбер («Ғазабы ҡәбер бәйәне») — йәшәү һәм үлем тураһында уйланыуҙы, ҡара һыҙыҡ («Был да ҡалмаһын») — йәмғиәттәге иҙеүсе һәм иҙелеүсе синыф араһындағы кәртәләрҙе белдерә. Әлбиттә, уларҙың эске мәғәнәһен, образлылыҡ нигеҙен, стилистик үҙенсәлеген, ни өсөн ҡулланылғанын әҫәр туҡымаһында башҡа һүҙҙәр, һүрәтләү-тасуирлау саралары менән бәйләп ҡарағанда ғына аңлап була. Мәҫәлән, ҡара таш ниндәй таш ул? Тәбиғәт тарафынан ҡарайтылған ташмы? Әллә мунса ташымы? Образлылыҡ өсөн ниңә ташты ҡараға мана яҙыусы? Әлеге тәбиғәт бүләге — йылҡылдап торған ҡап-ҡара таш күҙ яуын алырлыҡ матур була бит ул. Ләкин яҙыусы был урында «ҡара» һүҙенең кире сифатын һайлаған:

Ҡара таштар йыуыу менән ағармаҫ,
Шулай уҡ ул кеше халыҡҡа бармаҫ.

Ҡара таш шағирҙың поэтик фекерләүендә насарлыҡ символына әүерелә. Рәхимһеҙ, мәрхәмәтһеҙ, халыҡты аяҡ аҫтына һалып тапаусыларҙы образлы тасуирлау объектына әйләнә. Шулай итеп, әҫәр туҡымаһындағы һәр һүҙҙең мәғәнәһен ентекле анализ аша ғына ныҡлап аңлап була.

Халыҡтың: «Бер һүҙҙә мең биҙәк», — тип арттырып әйтеүендә лә хикмәт бар икән шул.

## Оло шағирҙың сәнғәтле теле
## (С.Ҡудаш)

Һәр һүҙ сәнғәте оҫтаһы тел диңгеҙенең иң тәрән еренә сумырға ярата. Сума ла унын төбөнән һүҙ ынйылары эҙләй. Таба алмаһа — әрней, һыҙлана, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй өҙгөләнә. Шунан был киң диңгеҙ ҡосағында бер арҡыры, бер буй йөҙөргә тотона. Эҙләнә. Ярһый. Шашҡан балыҡтай ҡылана, һаман да таба алмаһа, йәнә сума. Инде был юлы ынйы-мәрйенде эләктерә алмаһа, йәнә тәрәнгә сума. Ә эләктерә алған икән, ул — бәхетле. Әммә яңы ынйы менән әҫәр туҡымаһын сигергә ашыҡмай әле ул. Үҙенә тиклем булған һүҙ сәнғәте оҫталары уны ҡулланғанмы? Шул хаҡта уйлана. Әгәр ҡулланған икән, хәҙер инде уға был һүҙ-ынйының яңы, ҡулланылмаған аҫыл сифаттарын эҙләп баш ватырға кәрәк.

Тормош диңгеҙендә лә, тел диңгеҙендә лә арымай-талмай оҫта йөҙөүсе, халыҡ күңелендә йәшәү өлгөһө ҡалдырып киткән, оло шөһрәт алған Сәйфи Ҡудашты мин һүҙ сәнғәтенә үтә етди ҡараусы ана шундай ҡәләм оҫталарының береһе тип иҫәпләйем. 1913 йылда яҙылған «Бәхет эҙләгәндә» тигән тәүге шиғырында уҡ ул үҙен ысын мәғәнәһендә һүҙ сәнғәте маһиры итеп таныта алды. Ете генә строфанан торған был шиғырҙа шул осорҙа халыҡ йөрәгенән урғылып сыҡҡан моң аһәңе лә, быуаттарҙан-быуаттарға йырҙарҙа яңғырап килгән тормош фәлсәфәһе лә, яҡшылыҡ-яманлыҡ, кешелеклелек-кешелекһеҙлек, шәфҡәтлелек-шәфҡәтһеҙлек тураһында уйланыуҙар ҙа бар. Төрлө-төрлө һүҙбиҙәгес (эпитет), сағыштырыу-оҡшатыу, һүҙ алмаштырғыс (метафора), тәғбир бирәмеге (фразеология), ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр (антонимдар), мәғәнәләштәр (синонимдар) әҫәрҙәрҙең йөрәк тамырына йән-ҡан өҫтәй. Йәнә шуныһы иғтибарға лайыҡ: шағир халыҡ ижад иткән тел биҙәктәрен (традицион һүрәтләү сараларын) әҙер килеш тә файҙалана, уларҙы үҙгәртеп тә ҡуллана, әҫәр һәм ул сағылдырған осор һулышына яраштырып, үҙе лә яңыларын уйлап таба: ал ҡояшҡа төшкән ҡара ҡайғылар, уйһыу ерҙәр тулырлыҡ күҙ йәше, бәғерҙәрҙән ҡара ҡандар тамыу, яҙмыштың яуыз ҡулында ҡыҫылыуы, өмөт ҡояшының ҡанаты ҡайырылыуы, бәхет йондоҙона осоу, сәждәләргә эйелеп бағыу, өҙөлгән өмөттәр ялғаныу һ.б.

Бай, гүзәл Башҡортостан ерендә үҫкән мең төрлө сәскәләр, Урал күкрәген ярып сығып аҡҡан көмөш шишмәләр, нәҙекәй билле ҡыҙ йөрөшөн хәтерләтеп аҡҡан Ағиҙел дә Сәйфи Ҡудаш шиғриәтендә символ дәрәжәһенә күтәрелде. Ә ел шуларҙың һәммәһен йомшаҡ ҡулдары менән ихлас наҙлап иҫә. Юҡ, ул ғына ла түгел. Ел изге хәбәр ташыусы ла, кешеләр яҙмышын хәл итеүсе бөйөк көс тә, ил ҡеүәтенә ғәйрәт һалыусы ҡаһармандарса дан йырлаған ҡөҙрәт тә. Сәйфи Ҡудаштың «Яҙғы ел» шиғырында ел кеше сифатына инә. Яҙғы ел шаулай, шат-

лана, әрней, көлә, һыҡрана, шыңшый, илай. Ни өсөн? «Көҙгө елдәр» шиғырында Ғ.Туҡай ҙа елде илатҡан ине, был юлдарҙы йәнә ҡабатлап иҫкә төшөрәйек:

Көҙгө төн.
Мин йоҡлай алмайым.
Өй түрендә ел илай.
Ел иламай, ас үлемдән
Ҡурҡыуынан ил илай.

Туҡайҙа — көҙгө елдәр, Сәйфи Ҡудашта — яҙғы елдәр. Ни өсөн Туҡай көҙгө елде һайлаған? Көҙ муллыҡ осоро ла баһа. Ләкин ул осорҙағы ярлы халыҡ өсөн ҡайғы-михнәт мәле лә ул. Көләс йәй шаулап үтте. Ҡара көҙ етте. Ә ярлы-ябағаның бураһында ишле балаға ҡашыҡлап өләшерлек тә ризыҡ юҡ. Яҙға ул, бына-бына аяҡ һуҙам, тип, көскә барып сыға. Яҙғы ел быға һис тә битараф түгел. Яҙғы ел дә, кеше сифатына инеп, илап-илап йөрөй. Туҡай менән сағыштырып ҡарағанда, Сәйфи Ҡудашта елдең башҡасараҡ маҡсатта файҙаланырға тейешлеге аңлашылып тора. Шиғыр 1916 йылда яҙылған. Тимәк, ел империалистик һуғыш килтергән хәйерселектәрҙе күреп илай:

Ел һөйләй, һыҡрай, илай.
Вәхшәт, золомдан зарлана.
Донъяла хаҡлыҡ, хәҡиҡәт
Юҡлығынан ҡарғана.
Илаша ас, тол, етем —
Меҫкен, фәҡирҙәр донъяһы;
Ерҙе ҡаплаған һәләкәт.
Ҡайнай ҡан, йәш йылғаһы.

Бында яҙғы ташҡын урынына һалдаттар ҡаны аға. Һуғыш башлаған йыртҡыстар йәмле яҙҙы, донъяны тар-мар итә. Бына ниңә яҙғы ел һыҡрана.

Шағирҙың эпиграф итеп халыҡ йырын файҙаланыуы ла осраҡлы түгел. Ул әҫәрҙең идея-эстәлегенә, ҡан ағышына ҡушылып китеп, поэтик яңғырашты, мәғәнәне көсәйтергә ярҙам итә:

Һандуғасҡай һайрай: «Сут-сут, — тип,
Ҡуныр гөлкәйҙәрем юҡ-юҡ», — тип.
Мин дә шулай йырлайым былбылдай:
«Үҙ бәхеткәйҙәрем юҡ-юҡ!» — тип.

Йәнһеҙ әйберҙәрҙең йәнләндерелеп бирелеүе әҙәбиәт теорияһында һынландырыу тип атала: ҡояш йылмая, йондоҙҙар күҙ ҡыҫа, диңгеҙ үкерә, имәндәр шаулай, ел илай, буран ҡотора, ай йомшаҡ нурҙары менән иркәләй, ер менән күк серләшә һ.б. Сәйфи Ҡудаш һүрәтләү-тасуирлау сараһының был төрө аша эстәлекте тәрәнерәк аса, образлылыҡҡа, сәнғәтлелеккә ирешә. Был үҙенсәлек шағирҙың башланғыс ижадында уҡ күҙәтелә: ҡыштың ыжғыр һыуыҡ менән маһайыуы, яҙҙың гөл ҡосаҡлап килеүе, сәскәләрҙең наҙланып ултырыуы, ҡурайҙың бәғерҙәрҙе өҙөүе, елдең вәхшәт күреп зарланыуы һ.б.

Сәйфи Ҡудаш ижадының башланғыс осоронда уҡ поэзияла ҡоро һүҙҙәр менән генә эш итмәне, поэтик фекерләүен ул ниндәй ҙә булһа махсус бер үҙенсәлекле әйбер-предмет, күренеш-ваҡиғаға бәйләп бирә. Был иһә уның эстетик идеалын, донъяға ҡарашын, йөрәк тибешен тәрәнерәк аңларға ярҙам итә. Уның ижадында

фразеологик берәмектәр, мәҡәл-әйтемдәр айырыуса ҙур сәнғәт көсөнә эйә. Әммә уларҙы ла шағир бик һирәк осраҡта ғына әҙер килеш ҡуллана. Ул ҡулға ҡәләм алып яҙа башлағанда уҡ халыҡ ижад иткән поэтик сараларҙы үҙгәртмәйенсә генә файҙаланыуҙы сәйнәп биргәнде йотоу кеүек ҡабул итә. 1916 йылда яҙылған «Һалсылар» шиғырына иғтибар итәйек. Унда ла башта халыҡ йыры эпиграф итеп ҡулланыла:

Иҙел буйлап һал килә,
Һал өҫтөндә мал килә.
Ул малдарҙы тапҡан саҡта,
Йәш йөрәктән ҡан килә.

Һыҙылып ҡына йәйге ал таң ата. Таңғы ел менән урман шаулай. Ҙур ил менән иҫәнләшеп, нурҙар сәсә-сәсә, көлөп ҡояш сыға. Япраҡтар шыбырҙашып һөйләшә. Иҙел өҫтө ем-ем нурлана. Сәскәләрҙән тәмле еҫтәр аңҡый. Үләндәрҙән көмөш ысыҡ тама. Һандуғастар йәмгә бағынып, дәртләнеп саз ҡылдарын сирткәс, әрәмәләр, бөҙрә суҡлы талдар шатланып ҡуялар. Тәбиғәттә ни ҡәҙәр йәнлелек, хозурлыҡ, хис-тойғоларыңды даими ҡайнатып торорҙай гүзәллек. Ана шул күркәмлектәр эсендә, Иҙелдең талғын ҡосағында һалмаҡ ҡына һал ағып килә. Һал өҫтөндә ике йән эйәһе. Улар моң даръяһында иҙрәй. Береһе гөжләтеп ҡурай тарта, икенсеһе — ҡойроҡтағыһы — йыр һуҙа:

Аҡҡош ҡарап оса күлдәргә,
Һандуғастар ҡуна гөлдәргә;
Күрмәгәнгә, дуҫтар, күрһәтмәһен,
Ярҙам бирһен хоҙай күргәнгә.
Ҡысҡыра ла кәкүк, ай, ҡысҡыра
Буҙ йылғаҡайҙарҙың буйында.
Әйтегеҙ ҙә, дуҫтар, шул кәкуккә,
Ҡысҡырмайса торһон быйылға!

Был шиғырҙы уҡығанда, үҙең дә һиҙмәҫтән, Башҡортостандың бай, күркәм, матур тәбиғәте ҡосағына сумып хозурланаһың. Шул матур тәбиғәт ҡосағында һыҡраған ҡурай моңо, тормош ауырлығы булып яңғыраған йөрәк йыры күңелдәрҙе тетрәтә. Ә шулай ҙа һал өҫтөндәге ике әҙәми зат, хитланып табылған малдың йөрәккә ҡан һауҙырғанлығын аңлаһалар ҙа, тыуған ерҙең иҫ киткес матур тәбиғәтенә, тыуған илдең яҙмышына һис тә битараф түгелдәр. Киреһенсә, уларҙың моң-зары, ҡайғы-хәсрәте, йөрәк һыҡраныуы ахыр сиктә батырлыҡ-ҡаһарманлыҡ, илде ҙурлау төшөнсәһе менән бәйләнә. Халыҡта тыуған илде, уны һаҡлаусы ҡорос йөрәкле ирҙәрҙе данлаған күп кенә мәҡәл-әйтемдәр бар: «Айбарлы ирҙәр бар сағында, баҙынмаҫ дошман илемә»; «Батыр кәрәк яу килгәндә, түрә кәрәк дау килгәндә»; «Ат туйған ерендә, ир тыуған ерендә» һ.б. Сәйфи Ҡудаш шул төшөнсәләр нигеҙендә үҙе яңы мәҡәл-әйтем ижад итә һәм шулар аша бөтөн бер строфа төҙөй:

Ҡыҙыл ғына төлкө — тауҙар күрке,
Батыр ҙа ғына егет — ил күрке,
Батыр ҙа ғына егет — илдән китһә,
Шунда бөтә, дуҫҡай, ил күрке.

Йәш шағир ил, халыҡ яҙмышы тураһында ана нисек ҙур уйлай. I Донъя һуғышының иң ҡыҙыу мәлендә, 1916 йылда әйтелгән фекерҙәр бөгөнгө тормош-көнкүреш, ижтимағи-сәйәси хәлдәр менән ифрат ауаздаш. Батыр ҙа ғына егеттәр илдән китеп тора, гөл-сәскә эсендә балҡып ултырған ваҡ ауылдар ҡомға һеңгән һыу урынына юҡ була, һөҙөмтәлә ил күрке һүнә бара. Был хаҡта бик боронғо ата-бабаларыбыҙ ҙа ныҡ борсолған. «Ир бала үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә», — тигәне лә бар. Ә инде егет батырлығының ир күрке булыуын тәбиғәттең бер матур, йәнле, шиғри күренеше булған тауҙар менән сағыштырып биреү — сәнғәтлелекте бермә-бер арттыра.

Шағирҙың яҙғы ел образы аша нисек идея-эстәлекте асыуын, эмоциональлекте арттырыуын күргән инек инде. Яҙ — шағир ижадының шишмә башы. Яҙҙың көҙө булмайынса ҡалмай, әлбиттә. Шағирҙың да матур, алтын көҙө булырға тейеш. Сәйфи Ҡудаш уны төрлө күсмә мәғәнәләге һүҙҙәр менән аңлата. Ғүмерен ул кәбән менән дә сағыштыра. Кәбән ҡойоу — тормош ҡороу. Кәбән ҡоя башлау — тормош яҙы. 1985 йылда яҙылған «Кәбән ҡояш...» тигән шиғырында, йәшлек йылдарындағы кеүек, йәнә ер образына мөрәжәғәт итә шағир. Әммә был инде йәшлекте символлаштырыусы яҙ еле түгел, ә бәлки ҡартлыҡ килеүҙе хәтерләтеүсе көҙгө ел.

Көҙгө елдәр ғүмерем тирәгенең
Ай буйы тетмәһен теттеләр.
Туҡһан беренсемдең ел япрағын
Шатырлатып өҙөп киттеләр.

Ел образы шағирҙың тәүге шиғырҙарында уҡ башланып, һуңғы әҫәренә тиклем стилистик сара сифатында ҡулланыла, һәр осраҡта ул был традицион образды идея-эстәлеккә яраҡлаштыра белә. Әлбиттә, уның поэтик туҡымаһында башҡа образ-символдар ҙа ҙур эмоциональ көскә эйә. Ахыр сиктә шағир был ҡырыҫ, уҫал тормош майҙанына үҙе ел-дауыл булып килеп инә.

Гиҙәр өсөн ғүмерҙең сүлдәрен
Дауылланып елдәр булып иҫтем.
Кисер өсөн тормош диңгеҙҙәрен
Ҡул ҡабартып кәмәләрҙе иштем.

Шағирҙың йәшлегенә тағы ла әйләнеп ҡайтайыҡ әле. 1916 йылда яҙылған «Дим» шиғырында шундай юлдар бар:

Монарланып күренә ап-аҡ яры,
Күкрәк киреп, көслө батырҙай,
Һәйкәл кеүек торған ҡарт тирәктәр
Башҡорттарҙың ғүмерен хәтерләй.

Бындағы сағыштырыуҙарҙың ниндәй тәрән мәғәнә аңлатыуын аңлау ҡыйын түгел. Дим йылғаһы — йырҙарҙа матурлыҡ һәм батырлыҡ символы. Уның күкрәк киреп, көслө батырҙай тороуы шуны раҫлай, һәйкәл кеүек торған ҡарт тирәктәрҙең башҡорттар ғүмерен хәтерләтеүе лә ҙур поэтик көскә эйә. Башҡорт халҡының героик үткәне, ҡаһарманлығы, ил яҙмышы өсөн барған ауыр көрәштәрҙә күрһәткән батырлығы тарих сәхифәләренә яҙыла килгән. Шағир бына шуны илдең байлығына, күркәм, матур тәбиғәтенә бәйләп бирә. Бында образлылыҡ та, идеялылыҡ та, эмоциональлек тә ярылып ята.

Сәйфи Ҡудаш — Башҡортостандың халыҡ шағиры. Был бөйөк исемгә ул, минеңсә, икеләтә лайыҡ булды. Беренсеһе — ғүмере буйы халыҡ моңдарын йырлау менән. Икенсеһе — рәсми рәүештә ирешеү. Минеңсә, беренсеһе отошлораҡ. Сөнки, рәсми рәүештә түрәләр бирмәһә лә, ул инде халыҡ шағиры ине. Быны раҫлау өсөн ижадының башланғыс һәм һуңғы осоронан ҡайһы бер миҫалдар килтерҙек. Шағирҙың эстетик идеалы, поэтик фекер офоҡтарының киңлеге, аң даирәһе халыҡ теле диңгеҙе менән бәйле. Ижадының бейек кәбәнен ослағанда, һуңғы ваҡытта быны матур өлгөләрен ул айырыуса нык күрһәтте. Халыҡтағыса мәҡәл-әйтем формаларын алған ҡанатлы юлдары уны ысын мәғәнәһендә һүҙ сәнғәте оҫтаһы итеп танытты. Поэтик туҡымаһында намыҫ, кешелеклелек, изгелек төшөнсәләре ғәжәп көслө яңғыраш тапты. Әммә улар өгөт-нәсихәт юлы менән түгел, поэтик саралар ярҙамында ғәмәлгә ашырылды:

Әгәр керһәң насар уй менән һин
Сәскәгә бик бай бер баҡсаға,
Төшмәҫ күҙең ут алмайынса ҡалған
Зәғиф сүп затынан башҡаға.

Эйе, шиғриәт гөл-баҡсаһында ла сүп үләндәре күп булыуы мөмкин. Әммә баҡсаға ингәс, матурлыҡты, гүзәллекте, күркәмлекте һөйгән кешенең күҙе әле иң әүәл уларға түгел, күкрәп ултырған сәскәләргә төшә. Яҡшы күңелле кешеләр ҙә шулай. Улар алтын араһынан сүп, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләмәй, ә иң тәүҙә матурлыҡ, күркәмлек, гүзәллек ҡыҙыҡһындыра уларҙы.

Йәшәү, ғүмер итеү, тормош ҡороу быялалай шыма юлдан шыуып үтеү генә түгел. Йөҙ йәшкә яҡын йәшәгән шағир был хаҡта ысын мәғәнәһендә тәрән уйлана. Ул ошо турала халыҡса юмор менән былай ти:

Әгәр күлең һай булһа,
Батҡаҡҡа тиҙ күмелер.
Күпме тәрән сумһаң да,
Барыбер артың күренер.

Йәшәү дәрте аҙ булған, хеҙмәт һөймәгән, ялҡау кешенең күле һай була, икенсе төрлө әйтһәк, уның тормошо батҡаҡҡа күмелә. Ә инде ҡартлыҡ көнөндә күпме генә тәрәнгә сумырға тырышмаһын, артына буялған бысраҡ барыбер күренәсәк.

Йомғаҡлап шуны әйтке килә, Сәйфи Ҡудаштың теле халыҡсан, шул уҡ ваҡытта ул сәнғәтле, йәнле, образлы. Халыҡтағы тел гәүһәрҙәренән поэтик гөлләмәне оҫта яһай белә, уларҙы халыҡҡа тағы ла сәнғәтлерәк итеп ҡайтара алды.

* * *

Һүҙемде юғарыла әйтелгән өндәүгә яҡынырах нәсихәт менән тамамларға теләр инем. Үткән дәүер шағирҙарын ҡабат-ҡабат уҡып ҡарайыҡ та, уларҙан өлгө-үрнәк алайыҡ. Яңырыу осорона, яңы дәүер шиғриәтенә аяҡ баҫыу өсөн иң тәүҙә үҙ дәүерендекендә нык баҫып тороу кәрәк. Ә һуңғыһы иһә үткән быуаттарҙа һалынған ныҡлы нигеҙҙәргә ҡоролған. Ул нигеҙҙәрҙе һаҡлайыҡ, онотмайыҡ...